**Саф һауала күңел асыу сараһы: “Сәләмәт тәндә сәләмәт рух”**

**Ҡатнашалар:**
Алып барыусы
Айболит
Ата-әсәләр
Балалар.

**Алып барыусы:** Һаумығыҙ, балалар! Беҙ һеҙҙең менән саф һауала бөгөн уйындар уйнайбыҙ. Бергәләшеп “Аҡ тирәк, күк тирәк”те уйнап алайыҡ әле.

**Алып барыусы:** Балалар, ярыштар алдынан әҙерәк тәндәрҙе яҙып хәрәкәтләнеп алайыҡ.

*«Тыйылған хәрәкәт» уйыны.*
Тәрбиәсе төрлө хәрәкәттәр күрһәтә, балалар ҡабатлай. Кем тыйылған хәрәкәтте эшләй, алһа сыға. Иң аҙаҡта иң иғтибарлыларҙы маҡтап әйтеп китеү, бәләкәй приздар биреү.

*Айболит килеп инә:*
-Һаумыһығыҙ, балалар! Мин табип Айболит булам.Кем ауырый, мине нимәгә саҡырҙығыҙ? Нимә булып китте? Был Африкамы?

**Алып барыусы**: Юҡ, был Африка түгел.

**Айболит:** Балалар, һеҙҙә бөгөн һаулыҡ көнө. Ауырымайһығыҙмы? Сөнки был уйындарҙа тик һау балалар ғына ҡатнаша ала. Тамағығыҙ ауыртмаймы?
**Балалар:** Юҡ.
**Айболит:** Эсегеҙ?
**Балалар:** Юҡ.
**Айболит:** Аяҡ-ҡулдарығыҙ, тештәрегеҙ һыҙламаймы?
**Балалар:** Юҡ. *(Айболит балалаҙы ҡарай, тикшерә.)*
**Алып барыусы:** Айболит бабай, беҙҙең балалар ысынлап та һау-сәләмәттәр. Хәҙер улар үҙҙәре ошоноң тураһында һеҙгә һөйләп ишеттерерҙәр.

*Дүрт бала сыға ла, шиғырҙар һөйләп ишеттерә.*

1-се бала:
Иртәнге күнегеүҙәр

Файҙалы һәм бик кәрәк.
Барлыҡ ауырыуҙарҙан
Ул беҙгә терәк.

2-се бала:
Хәрәкәт – ул йүгереү,
Хәрәкәт – ул һикереү.
Хәрәкәт – ул йәйәү йөрөү,
Һыуҙа балыҡтай йөҙөү.

3-сө бала:
Ата-бабам белеп әйткән:
Хәрәкәттә – бәрәкәт.
Һаулыҡ – байлыҡ, муллыҡ өсөн,
Кәрәк икән хәрәкәт.

4-се бала:
Хәрәкәтле булһын уйын,
Хәрәкәтсән булһын ҡулың.
Шул сағында бәрәкәттә
Үтер һинең ғүмер юлың.

**Айболит:** Барығыҙ ҙа шәпһегеҙ, матурһығыҙ, бер ниндәй ауырыу менән дә ауырымайһығыҙ. Тимәк, һеҙҙең барығыҙға ла спорт уйындарында ҡатнашырға рөхсәт итергә була. Афарин! Улай булғас, күңелле көй аҫтында ата-әсәләр менән бергәләшеп хәрәкәтләнеп алайыҡ та ярыш эстафеталарына әҙерләнәйек.

**Алып барыусы:** Йәгеҙ әле, балалар, командалар ярыштарға әҙерме? Хәҙер командалар исем, девиз уйлай.

«Ҡайһы команда етеҙерәк?» уйыны.
- Мин берҙе һыҙғырһам, һеҙ тирә-яҡҡа йүгерешәһегеҙ, ике тапҡыр һыҙғырһам, ике командаға теҙелеп тораһығыҙ. Лимондар бер, апельсиндар икенсе командаға, ҡайһы команда етеҙерәк ?

**Алып барыусы:**

Хәҙер икенсе төрлө ярыш.

« Йылан».Кубиктарҙы урай-урай йүгерергә, ҡоршау аша үтергә һәм кирегә йүгереп ҡайтырға.

Өсөнсө эстафета: тупты ике кубик араһынан тәгәрәтеп үткәреү.

Дүртенсе эстафета: Ат сабышы.

Бишенсе эстафета:Кәрзингә тупты ташла.

Алтынсы эстафета:Сәкән менән тупты алып йөрө.

Етенсе эстафета:Обруч эсенә һикереп инеү.

Һигесенсе эстафета:Саңғыла йүгереү.

Туғыҙынсы эстафета:Тупты аяҡ араһына ҡыстырып һикереү

Унынсы эстафета: Арҡан тартышыу

Алып барыусы: Эстафеталар ошоноҢ менән тамам,ә хәҙер һүҙҙе жюриға бирәбеҙ.Командалар бүләкләнә.

Айболит: Һау-сәләмәт булығыҙ, балалар! Спорт менән даими шөғөлләнегеҙ. Киләсәктә олимпия чемпиондары булығыҙ!